# Ҡәҙерле тыуған ерем – Башҡортостан.
## (внеклассное мероп. Посвящено к дате присоединения Баш. К России. Беседа и викторина)

**Маҡсат:**

**1.**.Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл булыуына бәйләнешле уҡыусыларҙың илебеҙ тураһында белемдәрен арттырыу.

**2.** Тыуған яҡҡа һөйөү, хөрмәт, ғорурланыу тойғолары тәрбиәләү.

**Йыһазлау:** Башҡортостан картаһы, Дуҫлыҡ монументы һүрәте, Рәсәй, Башҡортостан символикалары.

## Дәрес барышы:

Һаумыһығыҙ балалар, ата-әсәләр! Бөгөн беҙҙә ҙур байрам- дуҫлыҡ байрамы.Ул халҡыбыҙҙың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына арнала.

*Башҡортостан ! Һинең гүзәллеккә*
*Тиң булырлыҡ ерҙәр бармы икән?*
*Аҡҡош кеүек ап-аҡ Ағиҙелкәй*
*Ҡайһы илдә генә бар икән?*
*Башҡортостан- алһыу таң иле,*
*Гөл-баҡсалар иле, дан иле!*

*(З. Күлбәков « Башҡортостан.» )*

Беҙ бөгөн бына ошо үҙебеҙ йәшәгән Башҡортостан тураһында үҙебеҙҙең белемебеҙҙе арттырып, үҙ-ара фекер алышырбыҙ.Гимн дәрәжәһен алған «Урал » йыры башҡорт ырыуҙарының халыҡ булып ойошоуын, Уралды тыуған төйәге итеүен, үҙ иленең азатлығы өсөн көрәшеүен бына нисек көйләп, һөйләп бирә:

*Күгәреп ятҡан Урал тауы,*

*Атай-олатайҙарҙың да төйәге,*
*Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған*
*Шунда ята батырҙар һөйәге.*
*Уралымдан да ғына бейек,ай, тау булмаç,*
*Уралҡайҙы һөймәç тә йән булмаç.*
*Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған*
*Ир-егеттең ғүмере йәл булмаç.*

Эйе, элек-электән башҡорт халҡы үҙ илен, үҙ ерен һаҡлаған, уның азатлығы өсөн ғүмерен йәлләмәгән. Кемдәр тыуған ил, батырлыҡ тураһында мәҡәлдәр беләә? «Үҙ илең- алтын бишек.», «Иленән айырылған- ҡанаты ҡайырылған.», «Эш батыры- ил батыры.», «Иле юҡтың- көнө юҡ.».
Ә хәҙер Башҡортостан тарихына күҙ һалайыҡ.
Викторина һорауҙарына яуап бирәйек:

1.Нисәнсе йылдарҙа башҡорт ырыуҙары Рәсәйгә ҡушыла?
2.Башҡортостандың Рәсәй составына инеүенең әһәмиәте ниндәй?
3.Өфө ҡәлғәһе ҡасан һалына?
4.Кем ул беҙҙең милли батырыбыҙ?
5.Башҡорттарҙың Наполеон ғәскәренә ҡаршы һуғышта ҡатнашыуы тураһында ниндәй йырҙар беләһегеҙ?
6.Кемдәр улар Әхмәтзәки Вәлиди, Шәһит Хоҙайбирҙин?
7. Башҡорт атлы дивизияһы командиры кем?
8. Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Александр Матросов – кемдәр улар?
9. Башҡортостандың данлыҡлы, ҡурҡыу белмәç «Урал бөркөтө» кем ул?
10. Мәсетле районының Советтар Союзы Геройҙары – кемдәр улар?
11. «Бейек Татр бөркөтө» - кем ул?

*Быуындарҙан күсеп быуындарға*
*Мәңге ал таң булып атыр ул!*
*Бөркөт төйәк иткән Уралҡайҙың*
*Ҡуйынында үҫкән батыр ул!*

*Тора батыр уяу, ҡыйыу ҡарап,*
*Һаҡлап илде, тыныс булһын, тип.*
*Һәр кешенең тормош – көнкүреше*
*Тик шатлыҡҡа ғынв тулһын, тип.*
*( В.Дәүләтшина һүҙҙәре, В.Мәүлитов көйө «Салауатым» йыры.)*

Беҙгә үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙ кемдәр булған, үҙебеҙҙең тамырҙарыбыҙҙы белеү мөһим.Был турала беҙгә шәжәрә ярҙам итер.(Хәйретдинова Лиананың шәжәрәһе уҡыла).Шәжәрәне белеү- үҙ тамырҙарыңды, тарихи үткәндәрҙе белеү ул. Ә үҙ тарихын белмәгән кеше киләсәкһеҙ ул. Шуға ла беҙ үҙ ырыуыбыҙҙы, ата-бабаларыбыҙҙың тарихын белергә тейешбеҙ.
Әгәр тарихҡа күҙ һалһаҡ, беҙҙең Ҡошсо ырыуы 14-15-се быуаттарҙа Миәс йылғаһы яр буйҙарынан был яҡтарға килеп сыҡҡандар Иң тәүге төпләнеү урыны булып хәҙерге Ораҫтау ауылы һанала. Һуңынан улар хәҙерге йәшәү төбәгенә килеп урынлашалар, йәки, төп төпләнеү урыны-Мәләкәҫ йылғаһы яр буйы.Беҙҙең районыбыҙ-Мәсетле. Ул үҙенә Әй йылғаһы яр буйының күркәм, бай тәбиғәтле убалы-тигеҙлекле,ҡатнаш урманлы ерен төйәк иткән.Үҙенең билдәле мәшһүр ҡумыҙсылары-Р.Заһретдинов, М.Зәйнетдинов, шағирҙары-Р.Әхтәри, Т.Даянова, һ.б., данлыҡлы хеҙмәтсәндәре, уңған кешеләре менән дан тота. 2-4 мартта булып үткән «Асыҡ республика ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр» бәйгеһе булып үтте. Был беҙҙең районда үткәрелеү – унын билдәлелеген раҫлай. Беҙҙең Мәләкәҫ ауылы ла уҙған йылда үткәрелгән « Иң матур төҙөк ауыл» конкурсында еңеп сыҡты. Былар бөтәһе лә беҙҙең данлыҡлы, ҡеүәтле

Башҡортостан халҡының ҡаҙаныштары, берҙәм рәүештә йәшәү эҙемтәһе. Тыуған ерҙә кешеләр татыу йәшәһәләр генә, тормош матур була, халҡы ла күбәйә, батырҙары ла данлана. Беҙҙең илебеҙ һәм еребеҙ бик матур. М.Хисамова һүҙҙәре менән әйткәндә:

*« Бала саҡтан һеңде күңелемә*
*Олатайҙың әйткән бер һүҙе:*
*Алтын тауҙарҙан да байыраҡ ер*
*Ҡәҙерлерәк – Тыуған ер үҙе.»*

Эйе, беҙ бөтәбеҙ ҙә ил тойғоһон белеп, ер ҡәҙерен тойоп, ата – бабаларыбыҙҙан ҡалған йола- берҙәмлекте аңлап, ир- егеттәр үҙҙәренең илгә таяныс икәнлеген төшөнөп үҫһәләр, һәр кем тыуған ер ҡәҙерен белер, тыуған ерҙән дә ҡәҙерле ер юҡ икәнлеген тойор.

Ошо бай тәбиғәтле, күп милләтле республикам Башҡортостан – татыу, милләттәр дуҫлығы асыҡ күренгән төбәк ул. Үҙаллылыҡ алыу менән бәйләнешле Башҡортостан үҙ хужалығын үҫтереүгә, халҡының йәшәү һәм эшләү шарттарын яҡшыртыуға ҙур көс һала. Бөгөн беҙҙә мәктәптең ата-әсәләр комитеты рәйесе Гиндуллин М Ә ағайығыҙ ҡунаҡта. Хәҙер һүҙҙе уға бирәйек.



-Афарин, балалар! Киләсәктә лә илебеҙҙән дуҫлыҡ уты, мәрхәмәтлелек ҡото китмәһен,таңдар тыныс атһын, ҡояш имен-аман ҡалҡһын!

*Урамыңда башҡорт, татар һүҙе,*
*Урыҫ һүҙе берҙәй тарала.*
*Был һөйләштән минең күңелемдә*
*Ҡабатланмаҫ бер йыр яһала.*
*Яҡты йөҙөң, дәртле йырың менән*
*Ҡунағыңды ҡаршы алаһың.*
*Мин ғашиҡмын һиңә, күркәм Өфө*
*Ҡарт Уралдың дуҫлыҡ ҡалаһы!*

Лев Сорокин.

Башҡортостан – Рәсәй – ҡайын ағасының бер япрағы ул. Рәсәй менән берлектә, татыулыҡта ул 450 йыл бергә атлай. Өфөлә, уға нигеҙ һалынған урында, Рәсәй – Башҡортостан дуҫлығына арналған монумент төҙөлә. Унда урыҫ һәм башҡорт ҡатындарының һындары дуҫлыҡ һәм татыулыҡ символдарын һүрәтләндерә.

*Бер үк күк аҫтында тыуғанбыҙ беҙ,*
*Бер төйәктә ғүмер итәбеҙ.*
*Бер тупраҡтың ризығын ашап,*
*Бер йылғаның һыуын эсәбеҙ.*

*Нисә ҡара – бер үк йондоҙ яна,*
*Бер үк Сулпан балҡый һәр иртә,*
*Хозурланып бер үк ай йылмая,*
*Бер үк ҡояш беҙгә нур бөркә.*

*Бер тупраҡҡа тамған күҙ йәшебеҙ,*
*Бер тупраҡҡа тамған тиребеҙ*
*Ҡан тамыры менән мәңгелеккә*
*Ҡушылып үҫкән тыуған еребеҙ.*




K Na Mg Al Zn Fe Ni Sn Pb (H) Cu Hg Ag Au
БАШКОРТОС-
ТАН-ДУСЛЫК
ИЛЕ